*Рим ЯНҒУЖИН,*
*тарих фәндәре докторы*

# *Жәлил Кейекбаев башҡорт-венгр бәйләнештәре тураһында*

Атаҡлы тел ғалимы Жәлил Кейекбаевтың күп яҡлы ғилми хеҙмәттәрендә башҡорт этнографияһына ҡағылышлы ҡиммәтле ҡараштар бар. Шуларҙың береһе булып башҡорт-венгр бәйләнештәре тора.

Башҡорт-венгр ҡәрҙәшлеге тураһында XIII быуаттан башлап (Юлиан, Гильом де Рубрук, Плано Карпини) бөгөнгә көнгә тиклем яҙалар (И.Страленберг, Н.М.Карамзин — XVIII быуат, И.Фишер, Д.А.Хвольсон, К.Уйфальфи — XIX быуат, С.А.Токарев, В.Н.Шастина — XX быуат һ.б.). Тик Ж.Кейекбаев был мәсьәләгә бөтөнләй яңы күҙлектән ҡараны.

1960 йылдар башында Венгрия Фәндәр академияһының президенты Лайош Лигети хат аша Ж.Кейекбаевтан боронғо башҡорт ҡәбиләләре *юрматы* һәм *йәнәй* тураһында уның фекерен һораған, сөнки шул исемле ҡәбиләләр (*ярмат* һәм *йәнөө*) венгрҙар составында ла булған.

Лайош Лигети үтенесен үтәү өсөн, Ж.Кейекбаев тикшеренеүҙәр үткәрә һәм башҡорт-венгр бәйләнештәре тураһында түбәнге һығымталарға килә.

*«Йәнәй»* һүҙе *«ҙур»* тигән мәғәнәне, йәғни ҙур ҡәбилә тигәнде аңлата. Ҙур ҡәбилә булған ерҙә уның *«кесе»*һе лә була. Һәм Венгрияла боронғо венгр ҡәбиләләре араһында *«кәси»* ҡәбиләһе лә булған.

*«Венгр»* һәм *«венгер»* һүҙе боронғо *«вунуғыр»* һүҙҙәренән яһалған. «Вун» башҡортса «ун» була. Шуға күрә венгрҙарҙы ҡайһы бер халыҡтар *«уңғар»* тип йөрөтәләр. Был һүҙ боронғо *«ун уғыр»* һүҙҙәренән яһалған. Башҡортостанда Биш Уңғар тигән ауыл исеме булыу ғәжәп хәл түгел. Ә *«башкорт»* һүҙе *бәш уғыр* һүҙҙәренән үҙгәргән: *бәш уғыр*, артабан *башғур* һәм *башкурт* йәки хәҙер *башкорт*. Боронғо төрки телендә *«бәш»* башҡортса *«биш»* тигән һүҙ. Шулай итеп, *«венгер»* (уңғар) һәм *«башкурт»* (башҡорт) һүҙҙәре икеһе лә бер төрлө юл менән барлыҡҡа килгән.

Венгрҙарҙың һәм башҡорттарҙың ҡәрҙәш булыуҙарының тарихи нигеҙҙәре бар. IV-V быуаттарҙа венгр ҡәбиләләренең боронғо төп йорто Обь — Иртыш булған. Унан венгрҙар көнбайышҡа күсеп киткән. Бер нисә йөҙ йыл буйы Көньяҡ Уралда, Иҙел—Яйыҡ—Һаҡмар буйҙарында күсмә тормош менән ғүмер иткәндәр. Шул ваҡытта улар боронғо башҡорт ҡәбиләләре менән бик тығыҙ аралашып булған. Шуға күрә XVI быуатҡа тиклем ҡайһы бер башҡорт ҡәбиләләренең үҙҙәрен *«эстәк»* тип атауы, ә ҡаҙаҡ халҡы тарафынан башҡорттарҙың XX быуатҡа тиклем ғөмүмән *«истәк»* тип аталыуы бер ҙә ғәжәп хәл түгел.

Боронғо венгр ҡәбиләләре Көньяҡ Уралдан башта Азов—Дон далаларына, унан VIII-IX быуаттарҙа Карпат тауҙары аръяғына күсеп киткән, уларҙың бер өлөшө Көньяҡ Уралда тороп ҡалған. Шуға күрә боронғо башҡорт ҡәбиләләре араһында *Юрматы, Йәнәй,* шулай уҡ *Кесе* ҡәбиләләре бар. Шул уҡ *Ярмат, Йәнөө* һәм *Кәси* ҡәбиләләре венгр халҡы составына ла ингән.

Башҡорт һәм венгр телдәре өсөн дөйөм булған һүҙҙәр күп. Ул һүҙҙәрҙең күбеһе башҡа төрки телдәрендә лә бар. Мәҫәлән, *арпа, буҙа, киндер, кубә, балта, алма, сыбәк, борсак, комалак, кесе, көр* һ.б. Бик күп һүҙҙәр фәҡәт башҡорт һәм венгр телендә генә осрай. Мәҫәлән:

| **башҡортса** | **венгрса** |
|---|---|
| шарҡана | шарҡан (шайтан) |
| бора йәки бора балы | бор (вино) |
| лапы | лап |
| сараҡ | суро |
| түңкәк | төңк |
| сөй | сөг |
| дары | дара (ярма) |
| себей йәки сипей (тауыҡ себеше) | сибе |

Ж.Кейекбаевтың хеҙмәтендә борон-ғо башҡорт һәм венгр ҡәбиләләренең нәҫел яғынан ҡәрҙәшлеге яңы дәлилдәр менән иҫбатланған. Һис шикһеҙ, ғалимдың был ҡараштары ике халыҡтың сығышына арналған хеҙмәттәрҙә сағылырға, лайыҡлы урын алырға тейеш.

### Жәлил Кейекбаев һәм «Венгр халыҡ әкиәттәре»

Жәлил Кейекбаев әҙәбиәтебеҙгә башҡа халыҡтарҙың әкиәттәрен башҡорт теленә тәржемә итеү оҫтаһы булып та инде. Был уңай менән бигерәк тә уның венгр әкиәттәре йыйынтығын күрһәтергә кәрәк. Китапҡа ингән әкиәттәрҙе венгр ғалимы Ғ.Э.Коложвари төҙөгән һәм Будапешта венгр телендә сыҡҡан «Сихырлы ҡурай» исемле йыйынтыҡтан Жәлил Кейекбаев тарафынан һайлап алынған. Ҡайһы бер әкиәттәрҙе яҙыусы Зәйни Рафиҡов тәржемә иткән. «Венгр халыҡ әкиәттәре» Жәлил Кейекбаевтың инеш һүҙе менән Өфөлә 1963 йылда донъя күрә.

«Әлекке замандарҙа боронғо башҡорт һәм венгр ырыуҙарының аралашып, ҡайнашып йәшәүен (Көньяҡ Уралда — Р.Я.) был ике халыҡтың ауыҙ-тел ижадында ла (әкиәттәрҙә лә) бик асыҡ күреп була», — тип яҙа Ж.Ғ.Кейекбаев. Был бигерәк тә «Аҡбуҙат улы», «Янош менән Елбикә» һәм «Үгәй әсәй» әкиәттәрендә сағыла.

«Аҡбуҙат улы» тигән венгр әкиәте «Айыуғолаҡ» исемле башҡорт әкиәтен хәтерләтә. Уларҙың йөкмәткеһе бер: Аҡбуҙат улы ла, Айыуғолаҡ та «үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш» ҡарт менән көрәшә. Ҡарт ер аҫтына йәшенә. Бөтә фажиғә ер аҫтында бара. Венгр әкиәтендә лә, башҡорт әкиәтендә лә батырҙарҙы ер аҫтынан сәмрегош алып сыға. «Тәү ҡарашта был ике әкиәттең бер-береһенә ғәжәп ныҡ оҡшауына һәм уларҙың асылда бер үк әкиәт булыуына аптырарға ла мөмкин. Ләкин боронғо башҡорт һәм венгр ырыуҙарының бер территорияла ҡатнашып, аралашып йәшәүен иҫәпкә алғанда, бында бер ниндәй ҙә ғәжәп итер урын юҡ, сөнки ул әкиәт боронғо замандарҙа уҡ ике халыҡ өсөн дә уртаҡ булған», — тип яҙа Ж.Кейекбаев.

«Үгәй әсәй» тигән венгр әкиәте лә сюжеты менән башҡорт әкиәте менән бер



*Ж.Кейекбаев, Ҡ.Даян, Ә.Харисов*

төрлө. Ике әкиәттә лә бабай менән әбейҙең ике ҡыҙы булған, береһе — бабайҙың ҡыҙы, әбейгә үгәй, икенсеһе — әбейҙең үҙ ҡыҙы. Әбей бик уҫал булған. Үҙенең ҡыҙын иркәләп кенә аҫраған, ә үгәй ҡыҙҙы туҡмаған, ашатмаған, атаһына хурлап ошаҡлаған. Төрлө мажаралардан һуң үгәй ҡыҙ өйгә ҡумта менән алтын, төрлө аҫыл әйберҙәр алып ҡайта, ә һылап-һыйпап үҫтергән үҙ ҡыҙы алып ҡайтҡан һандыҡ эсендә ҡара йылан була.

Венгр әкиәте «Янош менән Елбикә» сюжеты, этнографик яҡтары менән бик күп башҡорт әкиәттәрен хәтерләтә.

«Аҡбуҙат улы» әкиәтендәге Ҡайырһуяр, Ташонтар, Тимербөгәр батырҙар, «Янош менән Елбикә» әкиәтендәге Йәшенуҙар, Тауйөкмәр, Елөрәр, Уғатар һәм Ертыңлар башҡорт халҡының «Аҡъял батыр» һәм «Айыуғолаҡ батыр» тигән әкиәттәрендәге Һыңарайаҡ, Күлуртлар, Уҡъюнар, Тауҙытауғаһуғар тиһәк тә була.

Ж.Кейекбаев башҡорт телендә донъя күрһәткән венгр халыҡ әкиәттәренең әһәмиәте бик ҙур. Уның китабы әкиәт яратыусыларға йыйынтыҡ өсөн генә түгел, ә ауыҙ-тел ижады белгестәренә, этнографтарға бик ҡиммәтле сығанаҡ. Ж. Кейекбаев был хеҙмәте менән халыҡтарҙың сығышын өйрәнгәндә әкиәттең дә мөһим сығанаҡ булыуын күрһәтә.

**Тарих факультетында**
**иҫке төрки телен өйрәнеү**
**нисек башланды?**

1960 йылдың октябрь айы башы ине. Беҙ, тарих факультетының 2-се курс студенттары, сентябрь айында Асҡын районында колхозда эшләп ҡайтыуыбыҙҙың һөҙөмтәләрен тикшергәндән һуң, буласаҡ уҡыу программаларына күстек. Мин: «Беҙгә үле латин урынына иҫке төрки телен өйрәнергә кәрәк. Беҙҙең беребеҙ ҙә иҫкесә уҡый белмәй. Ә революцияға ҡәҙәре сыҡҡан бөтә тарихи китаптар, гәзит-журналдар ғәрәп графикаһында баҫылған. Шул мәсьәләне күтәрһәк нисек булыр?» — тинем. Китте ығы-зығы. Ҡайһы берәүҙәр: «Уҡыу программаһында ҡаралмаған, иҫкесә нисек уҡытһындар инде», — тине. Нисек кенә булмаһын, беҙ, башҡорт һәм татар егеттәре (беҙҙең төркөмдә тик ике генә ҡыҙ уҡыны, улар урыҫтар ине), ректорға киттек. Ҡабул итеү бүлмәһенә барып кереүебеҙ менән, секретарь беҙҙең турала ректорға белдерҙе. Ректор беҙҙең ҡаршыға сыҡты ла, йылмая-йылмая: «Нимә булды, ни эшләп бөтә группа менән миңә килдегеҙ?» — тип һораны. Мин ҡыйыу ғына: «Һеҙҙең менән генә һөйләшәһе һүҙ бар ине», — тип яуапланым. «Улай булғас, минең кабинетҡа керәбеҙ», — тине ректор.

Ректор ҡабул итәсәгенә ышана инек, сөнки ул беҙҙә партия тарихын уҡытты һәм бөтә университетта тарихты яҡшы белгән группа тип, беҙҙе йыйылыштарҙа маҡтай торғайны.

Үҙебеҙҙең латин теле урынына иҫке төрки телен өйрәнергә теләүебеҙҙе белдергәс, ул бер аҙ уйланып ултырҙы. Шунан һуң телефондан шылтыратты: «Жәлил Ғиниәтович, бында тарих факультетынан студенттар килде. Иҫке төрки телен өйрәнергә теләйҙәр. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?» Бер аҙҙан һуң беҙгә: «Ярай, башҡорт һәм татар телен белгәндәр иҫке төрки телен өйрәнерһегеҙ, профессор Жәлил Кейекбаев үҙе уҡытасаҡ, ҡарағыҙ уны, әгәр ҙә бер айҙан ғәрәпсә уҡый белмәһәгеҙ, кәрәгеҙҙе алырһығыҙ», — тип сығарып ебәрҙе.

Жәлил Ғиниәт улы беренсе дәрескә ғәрәп алфавиты алып килде, аңлатты ла: «Икенсе дәрескә уҡырға һәм яҙырға өйрәнергә тейешһегеҙ», — тине. Был йома көн ине. Нисек өйрәнергә? Бик ҡәтғи ҡушылды бит. Мин декандан рөхсәт алдым да, ошо уҡ кис тыуған ауылыма, Стәрлетамаҡ районына, Айыусыға ҡайтып киттем. Әсәйем менән ике көн-төн ғәрәп графикаһы менән уҡырға һәм яҙырға өйрәнергә тырыштым. Икенсе дәрестә Жәлил Ғиниәт улы мине таҡтаға сығарҙы ла «Ай» тип яҙырға ҡушты. Мин яҙҙым. «Ултыр, мырҙам, әллә иҫкесә элек белә инеңме?» — тине. «Юҡ, ошо ялда ауылда әсәйемдән өйрәндем», — тинем. «Маладис, бик тырышһың икән, һинән кеше сығасаҡ», — тип маҡтаны. Беҙ иҫке төрки телен XI быуат телсеһе Мәхмүт Ҡашғариҙың «Диуан лөғәт әттөрк» китабы буйынса өйрәндек. Һәр дәрескә 10-15 бит уҡып бара торғайныҡ. Бер ай, ай ярым ваҡыт үткәс, Жәлил ағай: «Егеттәр, һеҙ иҫке төрки телендә матур яҙырға һәм уҡырға өйрәндегеҙ, инде икенсе уҡытыусы буласаҡ», — тине. Шулай итеп, тарих факультетында беҙ иң беренсе булып иҫке төрки телен өйрәндек. Уның ойоштороуҫыһы, остазы һәм юл күрһәтеүсеһе атаҡлы профессорыбыҙ Жәлил ағай Кейекбаев булды. Бына 40 йыл инде тарих факультеты студенттары иҫке төрки телен өйрәнә. Күп тарихсылар иҫкесә, ғәрәп графикаһы менән яҙылған сығанаҡтарҙы күтәрә һәм ғилми әйләнешкә индерә.

*Ж.Кейекбаев ҡаҙаҡ ғалимдары менән*





10-2001.p65 187 02.11.01, 15:34